***Ринат КАМАЛ***

# Донъябыҙҙың йөҙө

## Өфөләрҙә, Ҡазандарҙа...

Тағы ла шул хаҡта һүҙ! Ауыл-ҡалаларыбыҙҙың йөҙөн биҙәү, архитектурабыҙ, скульптурабыҙ тураһында фекерҙәр башҡа килә... Ҡабатлау ҙа һымаҡ (был хаҡта уҙған йылдың 31 ғинуарында “Башҡортостан” гәзитендә “Мин үҙемә һәйкәл ҡуя алманым” мәҡәләһе донъя күргәйне).

Шулай ҙа ҡабатлауҙан доға иҫкермәй, тиҙәр, был мәсьәләләр бик тә мөһим. Һәр мәҙәниәтле илдәге кеүек, һәйкәлдәр беҙҙең дә йәмғәтселектең иғтибары үҙәгендә булырға тейеш.

Һәр ваҡыттағыса, ут күршеләребеҙгә ҡайырылабыҙ. Һуңғы йылдарҙа Татарстанда скульптура нык үҫеште. Республиканың һәр районында тиерлек “Дан” скверы булдырылған. Унда хеҙмәт, һуғыш батырҙары менән бер рәттән шул райондан сыҡҡан мәҙәниәт эшмәкәрҙәре һыны урын ала. Аҡтаныш районы үҙәгендә, мәҫәлән, йырсы Әлфиә Авзалова, скульптор Зөлфәт Басиров һәм шағирҙарҙың һыны түңәрәккә теҙелеп китә. Бик тә мәслихәт, йәш быуын фәһемле тәрбиә ала! Ниңә беҙгә лә шул башланғысты күтәрмәҫкә?

*Хәйҙәр Ғарипов*



Ҡазанда, Ҡабанкүл буйында, XIII быуат шағиры Ҡол Ғәлигә мөһабәт һәйкәл ҡуйылған. Афарин! Әлбиттә, беҙҙең күңелдәрҙе лә сәм тигәнең семетеп-семетеп ала: нишләп ул һәйкәл беҙҙә, ғалимдар фаразынса, әҙиптең үҙ тыуған илендә, йәғни Башҡортостанда ҡуйылмаған? Әлбиттә, үкенесле...

Ҡазандағы Муса Йәлил һәйкәлен алайыҡ. Ҡаланың символы, оҙон һәм ғазаплы тарих кисергән татар халҡы яҙмышын кәүҙәләндергән һәйкәл-тамға бит ул!

Ошонда ғәжәйеп бер йәнәшәлек пәйҙә була. Башҡорт халҡы ла үҙенең ҡанлы вә шанлы тарихында ошондай уҡ яҙмыш кисермәгәнме, ул да үҙ булмышын ошолай баш ҡалаһында һәйкәлдә һынландырырға хаҡлы түгелме? Афарин, Ҡазанда татар шиғриәте

йондоҙо Ғабдулла Туҡайға бик матур һәйкәлдәр бар. Ә әҙәбиәт белгесе Әхнәф Харисов әйтеүенсә, башҡорт халҡының шиғри һәләтен шулай уҡ сағылдырған Шәйехзада Бабичҡа Өфөбөҙҙә әлегәсә бер һәйкәл юҡ. Скульптор Хәйҙәр Ғарипов "Шәйехзада Бабич" фантасмагорияһы ижад итте. Авангард, заманса сәнғәттең аналитик жанрҙары формаһында башҡарылған әҫәр! Ниңә шуны ҙурайтып, Өфөбөҙҙөң үҙәк бер майҙанына ҡуймаҫҡа? Ҡазанда ысын мәғәнәһендә асыҡ һауа аҫтындағы сәнғәт ансамбле — "Ҡазан Кремле" бар. Ниңә беҙ, ғорур Башҡортостан вәкилдәре, татар ҡәрҙәштәребеҙ кеүек шундай сәнғәт өлгөләре тыуҙырмайбыҙ, үҙебеҙҙең матур һәм боронғо Өфөбөҙҙө шулай биҙәмәйбеҙ?

Был ерҙә әүәл-әүәлдән башҡорттар йәшәгән, әле иһә төрлө милләт вәкилдәре ғүмер һөрә. Әллә улар үҙ иле — Башҡортостан, баш ҡалабыҙ — йәмле Өфө менән ғорурланмаймы, уның да Ҡазан менән ярышыуын, Ҡазан кеүек йәмле булыуын теләмәйме? Ысынлап та, Ҡазан ҡалаһы Рәсәйҙең матур бер үҙәгенә әйләнде, уны төҙөкләндереү, тарихи булмышын һаҡлау, заманса биҙәү буйынса иҫ киткес ҙур эш башҡарыла, шул уҡ ваҡытта илебеҙ иҡтисадының мөһим өлкәһе булған Башҡортостан, уның баш ҡалаһы Өфө, ябай ғына итеп әйткәндә, күрекһеҙ бер ҡала, күрекһеҙ бер төбәк булып ҡала бирә.

Һуңғы ваҡытта республикабыҙҙың урыҫ телендәге матбуғаты биттәрендә был темаға бик күп мәҡәләләр баҫылды. Уларҙы башлыса башҡорт милләтле булмаған авторҙар яҙа. Өфөнөң тарихи йөҙөн һаҡлау, яңы заман ҡалаһын артабан камиллаштырыу, яңыса төҙөү, биҙәү тураһында фекер йөрөтә улар. Бик тә мәслихәт, был мәсьәлә барыбыҙҙы ла борсой. Икенсе яҡтан ҡарағанда, ул авторҙарҙың береһе лә Өфөнөң башҡорт иленең баш ҡалаһы икәнен әйтмәй, хатта был хаҡта өндәшеүҙе ниндәйҙер гонаһ, ғәйеп кеүек тә һанай. Өсөнсөнән, беҙҙе Өфө ҡала округы Советы ҡарарҙары ла аптырата: депутаттар һәр ваҡыт, берәй урамға башҡорт милли эшмәкәре исемен биреү тураһында һүҙ сыҡһа, ҡаршы төшә. Үҙған йылда Өфө ҡала округы Советы ултырышы, исемдәре халыҡта билдәле түгел тип, яңы урамдарға Атнабаев менән Өмөтбаев исемдәрен биреүҙән баш тартты. Әнғәм Атнабаевтың исеме Өфө халҡына билдәле түгелме? Әлбиттә, урыҫса ғына уҡыған, башҡортса, татарса бер ауыҙ һүҙ ҙә белмәгән депутаттар өсөн ул шәхестәр билдәле түгелдер, улар беҙҙең телебеҙҙе лә, мәҙәниәтебеҙҙе лә, тарихыбыҙҙы ла белмәй, белергә лә теләмәй. Өфө депутаты башҡорт телен белергә бурыслы! Уларға, бәлки, тарихыбыҙ ҙа, үҙебеҙ ҙә кәрәкмәйбеҙҙер, беҙ был ер йөҙөндә булмаһаҡ, моғайын, уңайлыраҡ булыр ине.

Әйткәндәй, улар белмәй, хаталана икән, ниңә уларҙан юғары торған орган — Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай Өфө ҡала округы Советы ҡарарын үҙгәртмәй, депутаттар хатаһын төҙәтмәй? Бындай парламенттың республикаға ни хәжәте? Был, йомшаҡ итеп кенә әйткәндә лә, башҡорт мәҙәниәте, башҡорт халҡының мәҙәни-матди мираҫы менән иҫәпләшмәүҙе аңлата булыр, был хәл менән беҙ ҡасанғаса килешеп йәшәргә тейешбеҙ? Өфө — башҡорт халҡының баш ҡалаһы түгелме һуң? Бынан ун йыл элек Санкт-Петербург ҡалаһынан килгән кеше менән осрашҡайным. Ул, урамдарҙың исемен күреп: "Өфө әле һаман булһа революция ҡалаһы булып ҡала икән", — тине.

2015 йыл Әҙәбиәт йылы тип иғлан ителде: Өфө урамдарына, ниһайәт, рус, башҡорт әҙиптәренең рәсемдәре төшөрөлгән баннерҙар эленде. Бик тә мәслихәт, әммә башҡорт яҙыусыларының һүрәттәре аҙ булыуы күңелде ҡыра. Исем өсөн генә эленгән кеүек. Милләтебеҙ мәркәзендә башҡорт әҙиптәре портреттарына урын юҡмы әллә?!

## Инеш башы

Үрҙә телгә алынған “Шәйехзада Бабич” фантасмагорияһының авторы ул. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Рамазан Өмөтбаев исемендәге премия лауреаты, күренекле скульптор Хәйҙәр Хәлидар улы Ғарипов. Йәғни бөтә Сибай ҡалаһын үҙенең скульптура һындары менән тултырған оҫта. Салауат Юлаев, Федор Белов, Мөхәмәтйән Шакирйәнов (Александр Матросов), Шәйехзада Бабич, Исмәғил Солтанов, Рәми Ғарипов, Зәки Вәлиди, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Мөхәмәтша Буранғолов, Заһир Исмәғилев бюстары авторы.

Ғәжәп бит: бөтә ҡаланы биҙәгән һынсы, улай ғына ла түгел, башҡорттоң иң арҙаҡлы улдарын һынландырған оҫта! Был күренешкә һоҡланырға, хатта көнләшергә мөмкин. Ҡәрәк тә. Үҙен иһә ҡәҙер-хөрмәт итергә, дөрөҫө, уста ғына йөрөтөргә тейешбеҙ, тиһәң дә яңылыш булмаҫ...

Шунда һоҡланыуым, хис-тойғоға бай һүҙем өҙөлә.

Хәйҙәр Ғарипов — скульптор. Башҡортта, ғөмүмән, һирәк һөнәр эйәһе. Һынсылыҡ, семәрләп биҙәү, ғөмүмән, төҙөлөш сәнғәте — элек-электән килгән шөғөл. Оҫталар боронғо ҡалаларҙың йөҙөн билдәләгәндәр, йорттарҙы йәмләгәндәр, ҡала майҙандарында ҡоласлы скульптуралар, һындар ҡорғандар...

Ҡайҙан өйрәнгән башҡорт егете был һөнәргә, ҡайҙан килгән ауыл балаһына бындай һәләт? Әгәр ҙә Хәйҙәр Ғариповтың биографияһына иғтибар итһәң, шул асыҡлана: йәш кешенең буй-һынынан бигерәк, рухы, күңел юҫығы һиммәтлерәк икән. Шуға халыҡта “Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә” тигән әйтем дә бар.

...Бәләкәй Хәйҙәр атаһы Хәлидар ағай менән көтөү көткәндә малдарҙы һыулауға төшөрә. Шунда күл ярында балсыҡ әүәләп уйнай. Балсыҡты пластилиндай күреп, төрлө һындар яһай. Атаһы ла малайҙың был шөғөлөн ҡыҙыҡ итеп: “Ҡайһылай ысын итеп эшләйһең ул”, — тип аптырай. “Был малайҙан кеше сығыр ул” — тигән уй ҙа дөрләгәндер, бәлки, ата күңелендә.

Һөнәрлененң ҡулы ете. Хәлидар быныһын ғына белә инде. Үҙе лә оҫта, һәр хәлдә ауылда уны шулай ололайҙар. Кешеләргә өҫтәл, шкаф, комод яһай, арба оҫталай, салғы, балта һабы... Икенсе ҡатыны Халисанән тыуған ете баланың тәүгеһе Хәйҙәр ҙә артынан йөрөп балта эшенә әүәҫләнде. Хатта атаһына иш, фекерҙәш тә булып китте. Оло малай менән атай. Был икәү кәртә-ҡураға төкәтеп яһаған оҫтаханаға инә лә һуңға ҡалып оҙаҡлап ултыра. Атай һөйләй, теге — үҙ һүҙле, еңмеш, ләкин “йомро башлы” малай — тыңлай. Һеңдереп ултыра.

— Минең атай — олатайың Ғәли — Зәки Вәлиди менән осрашты, — ти Хәлидар тауышын түбәнәйтеп. — Атайыма Зәки Вәлиди: “Беҙ аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа түгел, беҙ — йәшелдәр”, — тине.

Ғәли Ғарипов империалистик һуғыштан офицер булып ҡайтҡан, ауыл мәсетендә мәзин булып торған. Бәлки, ысындан да Зәки Вәлиди менән осрашҡандыр.

Ул йылдарҙа, Зәки Вәлиди исеме тыйылған заманда, атай ауыҙынан ғорурлыҡ менән әйтелгән бындай һүҙҙәр, әлбиттә, бала күңелен елкендермәй ҡалмағандыр. Бындай әңгәмәләр Науырҙаны уратып алған тауҙарҙың иң бейеге Боғастыла бесән сапҡан мәлдәрҙә лә дауам итә:

— Ни өсөн Боғастымы? “Бүгәс ҡасты”нан алынған уның исеме. Тал ҡаланы башта пугачевсылар ала (Верхнеуральск ҡалаһы Науырҙанан ни бары 18 саҡрым алыҫлыҡта ята), аҙаҡ, был нығытманы ҡалдырып, Әбей батша юлынан төньяҡҡараҡ сигенә. Ана ул — Әбей батша юлы! Аҫтараҡ — Балэскән йылғаһы. Олатайың шунда иген иккән. Был ергә Бүгәс менән Салауат, Әхмәтзәки Вәлиди менән Муса Мортазин аяҡ баҫҡан.

Тантана менән әйтелгән был һүҙҙәр малайҙың йөрәгенә барып етә. Хәтәр, уның тәпәйләп йөрөгән ерендә иҫ киткес ваҡиғалар өйөрмәһе дулаған, ата-бабалар ил тип, ер тип ҡан ҡойған!

Тәьҫирләнмәҫ ерҙән тәьҫирләнерһең, осҡонланмаҫ күңел осҡонланыр! Хәйҙәр ошолай бала саҡтан күңеленә ил батырҙары хаҡында риүәйәттәр һеңдереп үҫә. Тыуған ауылы тирәһендә шаңдаған ваҡиғалар уның үҙен дә батырлыҡ ҡылырға, ата-бабалары юлын ҡыуырға ғәйрәтләндерә. Ә нисек, ниндәй юл менән ил эшенә булышырға, дөйөм эшкә хеҙмәт итергә?

Бала саҡтан күңеленә төшкән осҡондар киләсәктә скульптура сәнғәтендә дөрләп китер тип кем уйлаған? Ә ваҡыты-мәле еткәс, Хәйҙәр Ғарипов, сәнғәт училищеһы студенты, донъя сәнғәт бишеге Ленинградҡа бара, мәшһүр Эрмитажға керә; унда, баҡһаң, Ҡушкилде (Науырҙаның элекке исеме) йәшмәһенән эшләнгән ваза ултыра! Ауылы эргәһендәге тауҙан табылған йәшмәнән һырлап, таш оҫтаһы Я.Коковин ғәжәйеп ваза, һауыт-храм яһаған! Эрмитажда уның эргәһенән һоҡланмайынса үтеп булмай! Таш оҫталары Башҡорт иле йәшмәләренән бына ниндәй сәнғәт гәүһәрҙәре ижад иткән! Бөтә донъя рәссамдарын хайран ҡалдырыр төйәктә, "хазиналар ожмахы"нда тыуып үҫкән икән дә Хәйҙәр! Тауҙары ябай тау түгел, ә тарихи ваҡиғалар, арҙаҡлы шәхестәр эҙен һаҡлаусы ҡомартҡы! Ҡарас (Науырҙа ауылынан сыҡҡан арҙаҡлы башҡорт батыры һәм сәсәне) менән ҡаҙаҡ батыры Аҡша атышҡан ер ҙә бынан йыраҡ түгел.

Йорт алдында хур ҡалырға,
Ҡыуған малды ҡалдырырға,
Бер истәккә баш эйергә
Ҡыҙыл яулыҡ ябынған
Еңгәң бармы ни бында? —

тип ужарланып яу һаҙағын тоҫҡаған Аҡшаға:

*Оҫтаханала*



Ҡуҙы яуын ҡыу йәйә,
Тарта алмаһам, миңә хурлыҡ,
Тартҡан саҡта, сатнаһаң,
Ул ваҡытта һиңә хурлыҡ,
Тоҫҡаған ергә тейгеҙмәй,
Яҙа тартһам, миңә хурлыҡ, —

тип, Аҡшаның күкрәген үтәләй тишә атҡан Ҡарас батыр баҫып торған тау эргәлә генә. Етмәһә, ауыл Урал батырҙың Һомайҙан тыуған Яйыҡ исеме менән аталған йылға ярында ята. Урал батыр тоҡомонан таралған ҡәүем. Уйлаһаң, уйылып китерлек бит!

“Унынсы класты тамамлағас, атайым менән инәйем өгөтләп, Өфө сәнғәт училищеһының һынлы сәнғәт бүлегенә алып барҙы, — тип хәтерләй скульптор шул саҡтарҙы. — Атайым менән балта эшендә лә күп йөрөгәс, ниндәйҙер һәләтемде аңғарғандыр, күрәһең. Училищеға инә алманым. Киләһе йыл да шул уҡ уңышһыҙлыҡ... Әлбиттә, ҡулына балсыҡ менән балтанан башҡа нәмә тотоп ҡарамаған ауыл балаһы нисек итеп сәнғәт мәктәптәрен тамамлап, оҫталар ҡулында тәрбиәләнеп килгәндәр менән көс һынаша алһын? Ул арала армияға йәшем етеп, алып та киттеләр”.

Хәрби хеҙмәттә саҡта егеттең атаһы Хәлидар ағай мәрхүм була, 18 йәшлек Хәйҙәрҙе, алты ай хеҙмәт иткәс, таянысһыҙ ҡалған ҙур ғаиләгә саҡыртып ҡайтаралар. Ләкин сәмсел егет бирешмәй, 1970 йылда, 22 йәштә, барыбер сәнғәт училищеһына барып инә. Икенсе курста уҡығанда, ятаҡ мәсьәләһе хәл ителмәгәнгә күрә, студенттар исеменән етәкселәргә, редакцияға хат әҙерләгәне өсөн училищенан ҡыуалар. Баҡтиһәң, студенттарҙы, иҫке ятаҡты йүнәтәбеҙ тип, спорт залына һалып ҡуйғандар, ә ҡағыҙҙа, документтарҙа, дөйөм ятаҡ күптән файҙаланыуға тапшырылды тип, отчет биреп бөткәндәр.

Сәмсел, тура һүҙлеләр, әлбиттә, донъяға һыймай, ундайҙарҙан һәр урында ла ҡотолорға тырышалар. Әммә уҡырға, һөнәрле булырға кәрәк. Ныҡыш егет киренән шул уҡ училищеға килә, яңынан уҡый башлай. Шул осорҙа Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләп йөрөгән Таңсулпан исемле Баймаҡ ҡыҙы менән сәсен сәскә бәйләй. Ир кешегә — терәк, ҡатын-ҡыҙға таяныс кәрәк, бәндәләр шулай парлашҡас ҡына донъя гөрләп китә, йәшәү үҙенең ысын асылына ҡайта.

Йәштәр Йәшлек бульварының 8-се ятағында тормош ҡороп ебәрә. Бәләкәй генә бүлмә булһа ла, йәш ғаилә — йәш дәүләттең үҙ мөйөшө, шунда туғандар, таныш-тоноштар килә. Сәнғәт училищеһы студенты Хәйҙәр ятаҡ стенаһына ҙур ҡағыҙ йәбештерә лә Шамун Фидаиҙың һуңғы минуттарын күмер киҫәге менән бәйән итә... “Ҡорбан да, йәлләттәр ҙә ошонда, төнгө усаҡ һәр ҡайһыһының йөҙөндәге аяуһыҙ дөрөҫлөктө яҡтырта, — тип яҙасаҡ буласаҡ әҙибә, скульпторҙың хәләл ефете Таңсулпан Ғарипова һуңыраҡ. — Эш тамамланыуға яҡынлашҡас, Хәйҙәр уҡытыусыһы, скульптор Ғүмәр ағай Мөхәмәтшинды саҡырҙы. Өйҙә булғандың барын өҫтәлгә ҡуйып, үҙебеҙсә табын ҡорҙоҡ. Һыйҙың наҡыҫлығынан ер тишегенә инерҙәй булып оялып ултырған булам, ә былар уны һиҙмәгән дә кеүек. Әңгәмә Фидаи композицияһынан ил, туған тел хаҡындағы һүҙҙәргә, ғөмүмән, халыҡ тарихына, уның көнитмешенә күсте. Мин шул саҡта Хәйҙәрҙең Ғүмәр Мөхәмәтшин оҫтаханаһына балсыҡтан һын яһарға өйрәнер өсөн генә йөрөмәгәнен аңланым. Ғүмәр ағай оҫтаханаһында Рәми Ғарипов та, башҡа фекерҙәштәр ҙә бик йыш була ине бит...”

“Училищела белем алған йылдарҙа мин уҡытыусым, остазым Ғүмәр Мөхәмәтшин менән яҡындан аралашып йәшәнем, — тип иҫләй Хәйҙәр Ғарипов. — Әйткәндәй, ул минең бер нисә эшемдә авторҙаш та (Сибайҙағы Салауат Юлаев, Зәки Вәлиди һындары). Бына шул кеше мине һын ҡойорға ғына түгел, ә күңелем, аңым менән мәҙәни йәһәттән үҫергә, камиллашырға ярҙам итте. Уның йортона рухташтары, коллегалары, дуҫтары йыйылып, батырҙарыбыҙ тарихы, милләтебеҙ көнкүреше, бөгөнгө сәйәсәт кеүек темаларға һөйләшер, бәхәсләшер ине. Ғүмәр Хәйәмдән алып үҙебеҙҙең авторҙарға тиклем яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен уҡыйҙар, тикшерәләр. Мин шулар араһында ашауымды, йоҡомдо онотоп таңдар аттырҙым, мәктәптә ала алмаған белем, тәжрибә тупланым. Бына шул замандарҙа күңелемә халҡымдың данлы ул-ҡыҙҙарының һындарын эшләү уйы орлоҡ булып төшөп ятҡайны, үҙ мәле еткәс, шул орлоҡтар емештәрен бирҙе”.

Етмешенсе йылдар... Ул саҡта күңелеңдә урғылған уйҙарыңды бөтә кеше менән дә ярып, уртаға һалып һөйләшеп булмай ине әле. Һәр тыйылған нәмә — серле. Шул серлелек йәштәрҙе үҙенә тарта. Хәҙерге заманда бер нимә лә тыйылмай һымаҡ, әммә йәштәрҙең барымы, теләк-ынтылышы юҡ кеүегерәк. Икенсе яҡтан, матди яҡ, етешмәгәнлек, аслыҡ-яланғаслыҡ бәкәлгә һуға. Шулай ҙа күңелдәрҙә — киләсәккә өмөт, ышаныс. Студент Хәйҙәр ҙә ошондай ышаныс, дәрт-дарман менән йәшәй, эйе, киләсәгенә ышана. Ҡүмер йә төҫтәр ярҙамында образ, һындар тыуҙырырға ынтыла, шуларҙы киндерҙә йә балсыҡта һынландырырға ашҡына. Нәҡ ошо мәлдә уның ижад ҡомары асыла. Бер мәл уларҙың сәнғәт училищеһы класына, үрҙә әйтелгәнсә, сәнғәт бишеге Ленинградҡа юл төшә. Ә аҡсаһы ҡайҙа? Үҙең ярлы булһаң да, кеҫәңдә аҡсаң мул булһа ине, тигән берәү. Юҡ шул, Хәйҙәр яна, уртаға өҙөлгән йылан хәлендә ҡала. Нишләргә? Әле Наурыз урта мәктәбендә уҡығанда уҡ ул Мәскәүҙәге художество студияһына ситтән тороп уҡырға ингән була, ошо училищеға инер өсөн Өфөгә килә, төҙөлөшкә эшкә урынлашып, кистәрен студияға йөрөй, рәсем төшөрөү серҙәренә тәрәнерәк үтеп инергә тырыша. Ә Ленинград... Эрмитаж, Рус музейы... Ғөмүмән, ул саҡтағы Санкт-Петербург үҙе торғаны бер сәнғәт донъяһы ине бит! Ҡала — асыҡ һауа аҫтындағы сәнғәт музейы! Хәҙер генә ул төрлө реклама, йылҡылдап торған уттар, сағыу буяуҙар менән уның ысын сәнғәткә хас илаһилығын, ҡабатланмаҫ гүзәллеген һәм эстәлеген боҙоп бөттөләр. “Мин, аптырап, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙәбиәт секторында эшләгән әхирәтем, хәҙер инде танылған шағирә Таңһылыу Ҡарамышеваға өндәштем, — тип яҙа Хәйҙәрҙең тормош иптәше Таңсулпан Ғарипова. — Ҡешегә һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған Таңһылыу был юлы ла әмәлен тапты. Оҙаҡ уйлашҡандан һуң, минең берҙән-бер шәлде һатырға булдыҡ. Һатыуҙы Таңһылыу үҙ өҫтөнә алды. Шулай итеп, Хәйҙәр ысын сәнғәт донъяһы менән күрешергә Ленинградҡа осто. Талды йәштән бөгәләр, тиҙәр бит. Ижад кешеһенең донъяға ҡарашы, эстетик йөкмәткеһе формалашҡан саҡта һәр нәмә иғтибарға лайыҡ. Һынлы сәнғәттә лә бит бик күп ағымдар, ижади мәктәптәр, дәүеренә ҡарап, төрлө стилдәр бар. Архитектура яғынан әллә ни аҡһамаһа ла, һынлы сәнғәт өлкәһендә башҡорт рәссамы өсөн мәктәп булырҙай сәнғәт менән маҡтанырлыҡ түгел инек әле ул саҡта. Аҙаҡ, бик күп йылдар үткәс, Питерға икәүләп барғанда, Эмиль Актуан Бурделдең “Бетховендың башы” скульптураһы ҡаршыһында оҙаҡ ҡына туҡталдыҡ”.

## Художниктың булмышы — уның стилендә

*...Берсә аҡтар, бер ҡыҙылдар булып,*
*Йыл артынан йылдар аҡһындар.*
*Хәйҙәр ағай!*
*Сығар, тап һәм сығар*
*Ҡара ҡумталарҙан аҡ һындар...*

*Рәйес Түләк.*

Художниктың әҫәрҙәрен ҡарағас, уның ижад булмышы, һүрәтләү алымдары хаҡында уйланғанда, бер деталь иғтибарымды йәлеп итте. Скульптор Хәйҙәр Ғарипов башлыса бюст-портреттар ижад итә. Бюст-портреттар, бәлки, Башҡортостанға ҡулайлылыр әле, тип уйлап ҡуяһың, сөнки беҙҙә билдәле шәхесте бөтә һынына йәки баҫтырып эшләп ҡуйыу йолаһы юҡ тиерлек. Шулай ҙа улар юҡ түгел — Мәжит Ғафури, Мостай Кәрим, Аҡмулла һындары Өфөбөҙҙөң күркәм биҙәге. Уларҙы, башлыса, Мәскәү скульпторҙары ҡойҙо, ә беҙҙекеләр... Әллә аҡса юҡ, әллә башҡа сәбәп?.. Ҡомар, ҡыйыулыҡ, дәрт-дарман етмәйме? Беҙҙекеләр бюст ҡоя, уҙа барһа, шәхесте күкрәгенән кире киҫә лә ҡуя. Был күрер күҙгә сәйер ҙә, ғәжәп тә. Ниңә Мәскәүҙә кешене тулы һынына баҫтыралар, ә беҙҙә бюст менән сикләнәләр?

Бында, бәлки, бөтә нәмә матди яҡҡа, әлеге лә баяғы аҡса мәсьәләһенә, республиканың мөмкинлектәренә бәйлелер. Ихтимал, был мәсьәләләр киләсәктә, байый төшкәс, икенсе төрлөрәк хәл ителер. Ә ижад кешеһенең эшләү алымына, һүрәтләү сараларын ҡулланыу маһирлығына бәйле, Хәйҙәр Ғарипов иң элек геройының күңел донъяһына, характерына иғтибар итә. Уның өсөн теге йәки был шәхестең йөҙ-һыҙатының идеаль оҡшашлығына өлгәшеү мөһим. Скульптурала был мөһим талаптарҙың береһе, сөнки Хәйҙәр Ғариповтың күп геройҙары — тарихи башҡорт шәхестәре, әйткәндәй, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың таш һындары әле тарихта тәүләп һынландырыла. Үрҙә аталған геройҙарҙан тыш, беҙҙең бихисап милли батырҙарыбыҙ ташта, бронзала, мәрмәрҙә, гипста һынландырылыуға лайыҡ (Урал батыр, сәсәндәр, милли хәрәкәт етәкселәре, Алдар, Буранбай, Байыҡ, Бәпәнәй, Көҫәп батырҙарға ла һәйкәл ҡуйылмаған).

Әле башҡорт скульптура сәнғәте үҙенең йылъяҙмаһын яңы ғына яҙа башланы. Шуға реализмға таянмай нишләйһең... Иҫ киткес бай тарихлы башҡорт халҡы был сәнғәт төрөн яңынан үҙләштерергә мәжбүр, тигән тойғо ҡала. Буласаҡ башҡорт скульпторы Буртендең "Бетховендың башы"на текәлеп тормай ни хәл итһен! Кешенең сырайында, уның күҙ ҡарашында сағыла бөтөн булмышы. Эске донъя, күңел сифаттарын кеше башын һынландырмай нисек бирәһең? Ә кәүҙәһен эшләп ҡуйыу аҙаҡ бер ниндәй ауырлыҡ та тыуҙырмай.

Скульптор Хәйҙәр Ғарипов үҙе яһаған геройҙың реаль йөҙ-һыҙатын сағылдырыуҙы мөҡәддәс бурысы һанай. Был тамашасы, тыуған халҡың алдындағы яуаплылыҡ та. Билдәле тарихи шәхестең һынын урамда йәиһә майҙанда күргәс, йәш быуын, нәҡ ошондай кеше булған икән, тип ҡабул итәсәк бит. Скульптор Ғарипов — беренсенән, реалист, икенсе яҡтан ҡарағанда, уның башҡа төрлө алымдар менән эшләгән портреттары, һын-бюстары ла бар, әммә улар әле халыҡ иғтибарына тәҡдим ителмәгән. Мәҫәлән, беҙ үрҙә телгә алған "Шәйехзада Бабич" фантасмагорияһы. Реалистик стилдә эшләнгән Бабич һәйкәл-бюсы Сибайҙа, Йылайырҙа ҡуйылды, ә фантасмагорик образ-һыны Өфөлә Мил-

ли Әҙәбиәт музейында һаҡлана. Беҙ шул ижад емешен Өфөбөҙҙөң үҙәгенә ҡуйырға, уны, Ҡазандағы Муса Йәлил һәйкәле ише, баш ҡалабыҙҙың символына әүерелдерергә тәҡдим итәбеҙ. Зәки Вәлиди, Урал батыр комплексы ла бер ергә лә урынлаштырылмаған.

Был хаҡта Хәйҙәр Ғариповты һәм уның эштәрен ихлас яратҡан шағир Рәйес Түләк 2006 йылдың 16 ноябрендә үк “Йәшлек” гәзитендә яҙып сыҡҡайны. “Хәйҙәр Ғарипов халыҡ хөкөмөнә Шәйехзада Бабич һәйкәленең ике төрлө жанрҙағы модель-вариантын тәҡдим итә. Береһе беҙ күреп ғәҙәтләнгән жанрҙа — реализм. Икенсеһе сағыштырмаса һирәк осраған, эстетик планда реализмдан һис кенә лә ҡайтыш булмаған, фекер-мәғәнә йөкмәткеһе буйынса байтаҡҡа тығыҙыраҡ һәм күпкә “йәшерәк” жанр — фантасмагория. Ул реализмдан үҙенең символик элементтарының күплеге менән айырыла. Тап ошо үҙенсәлеге (хатта был ике жанрҙың һәр ҡайһыһына ла берҙәй үк күләм биргән осраҡта ла), уны үрҙә һаналған барлыҡ параметрҙары буйынса ла байтаҡҡа күп ҡырлы, тос фекерле яһай, мәғәнә тәрәнлеге бирә. Саҡ ҡына образлы фекерләй белгән кеше өсөн дә был жанр реализмға ҡарағанда күпкә йөкмәткелерәк. Бына ул: ҡәбер (тарих тип аңлайыҡ) таштарын аҡтарып яҡты донъяға сығып килгән Бабич! Бер ҡулында — ҡәләм, икенсеһендә — мандолина. Тик был ҡулдар кәүҙәнән ҡырҡып төшөрөлгән. Һул яҡ күкрәген олоғара йондоҙ ярып үткән. Ошо яра аша йөрәк тәңгәлендә ут баҙлағаны күренә. Әйләнә-тирәләге эре-эре ҡәбер таштары шағирға әле һаман донъяға тулыһынса сығырға ҡамасаулай, бил тәңгәленән ҡыҫып тора. Ә шағирҙың торошо, ҡолас киреп сәхнәгә һикерергә әҙерләнгән һыны бейеүсенекенә тартым”, — тип иҫбат итә шағир.

“Ҡулдары ҡырҡылған булыуына ҡаршылар күп, моғайын, был вариантты һайламаҫтар”, — ти автор бошоноп. “Хәйҙәр ағайҙың шикләнеүе дөрөҫкә сығыуы бик ихтимал”, — тип көйөнә Рәйес Түләк.

Хәйҙәр Ғарипов тарихи шәхестәрҙең йөҙ-һыҙаттарының реаллеккә тап килеүе өсөн тырыша. Был — тәбиғи. Мәҫәлән, Учалы районының Ҡунаҡбай ауылында Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросовҡа) ҡуйылған һәйкәл. Шул ауыл кешеһе булараҡ, уны бында нәҡ ошондай йөҙ-һыҙатлы итеп иҫләйҙәр. Әйткәндәй, скульптор оҫтаханаһында әҙәби китаптар, Бабичтың шиғри әҫәрҙәре, халыҡ тормошонда кәрәкле әйбер-монаяттар һәм, әлбиттә, геройҙарҙың ҡағыҙҙағы рәсем-портреттары күп. Автор ҡайһы бер геройҙары менән реаль оҡшашлыҡты компьютерҙағы һүрәт менән сағыштырып та ҡарай икән, шулай ул идеаль дөрөҫлөккә, тап килеүгә өлгәшә.

## Баймаҡҡа юл

Өфө сәнғәт училищеһын тамамлағанда, йәш скульпторҙың ғаиләһе ишәйгәйне. Ҡатыны Таңсулпан ул таба. Айтуған исеме ҡушалар, үҙенең театр декораторы тигән дипломы бар. Ә ҡатыны фән юлын һайлай. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында кандидатлыҡ минимумдарын да тапшырып бөтә. Шулай ҙа ауыл балаһына ҡалала йәшәү еңел түгел. Ир ҡайҙа — ҡатын шунда, ул — еп, энәһе артына эйәреп йөрөмәй булмай. Ғариповтарҙың мөлкәте — ике тоҡ китап. Таңсулпан бала күтәреп, Хәйҙәр шул ике тоҡто артмаҡлап, Баймаҡҡа юлланалар. Хәйҙәрҙе башта уҡ художество мәктәбе директоры итеп тәғәйенләйҙәр, Таңсулпан тәүҙә Йылайыр урта мәктәбендә уҡытып ала, аҙаҡ Баймаҡ ҡалаһының 1-се мәктәбенә күсә. Икенсе бала — Айбулат тыуа, тормош яйға һалына. Хәйҙәр художество мәктәбендәге эше менән генә мөрхәтһенмәй, халыҡ театрына рәссам

да булып урынлаша. Күп тә үтмәй, Баймаҡ халыҡ театры Илшат Йомағоловтың “Нәркәс”ен сәхнәләштерә. Спектаклде хатта Мәскәүгә фестивалгә алып баралар. Ул баш ҡала театр белгестәре тарафынан яҡшы баһалана, ә спектаклдең сценографияһы фестиваль сиктәрендә беренсе урынға лайыҡ була. Был уңыштан ижадсының түбәһе күккә тейерме, тиһәләр, ул шатланған да кеүек түгел. Һәр хәлдә, ысын ижадсының башы тәүге еңеүҙәрҙән генә әйләнмәй, ә яңы үрҙәрҙе көҫәй: киләсәккә төбәп оло хыялдар менән янған ижадсы ваҡ-төйәк рәссам кәрәк-яраҡтарын йөкмәй ҙә, илгә ҡайтыуҙың ояты юҡ тип, Учалыһына ҡайтып китә. Тирәһендәгеләр, ҡатыны аптырап ҡала. Таңсулпандың ҡулында — ике йәшлек Айтуған менән ҡырҡы ғына тулған Айбулаты!

## Учалыға ҡайтыу

Шулай итеп, Хәйҙәр Учалы ҡалаһының художество мәктәбендә эшләй башлай. Бер үк ваҡытта Учалы тыуған яҡты өйрәнеү музейын башҡорт халҡының тормошон, көнкүрешен, тарихын һынландырған һын-образдар менән йыһазландырыу менән дә шөғөлләнә.

“Баштараҡ мин Хәйҙәрҙең ниндәй оло эшкә тотонғанын шәйләмәйерәк тә ҡалдым, — тип хәтерләй Таңсулпан Ғарипова ошо йылдар тураһында. — Мин, ике йәш балалы әсә, мәктәпкә эшкә сыҡтым. Ике аҙна һайын Хәйҙәр Учалынан Баймаҡҡа ялға киләә. Ҡилгән һайын тоҡсайында бер баш була. (Әлбиттә, үҙе яһаған). Шунан өйҙөң кухняһында йә форма ала, йә формаға төп материалды ҡоя. Ул киткәс, кухняны икеөс көн буйы гипс, алебастр, цемент саңынан таҙартып хәлең бөтә. Бер йылдан һуң, бәләкәй генә бер “хрущевка” алып, Хәйҙәр беҙҙе Учалыға күсереп алды. Тыуған ер менән хушлашыу бик ауыр, бик яманһыу булһа ла, энә ҡайҙа — еп шунда тип, киттем. Ленин Комсомолы урамындағы подвалдан Хәйҙәргә оҫтахана бирҙеләр. Хәйҙәр ул осорҙа В.И.Лениндың, Ф.Э.Дзержинскийҙың бюстарын күп эшләне. “Ураҡ һәм Сүкеш” район гәзите редакцияһында эшләгән сағым. Эштән ҡайтып, балаларҙы ашатам да подвалға, оҫтаханаға ашығам һәм төнгә тиклем шунда ҡайнашабыҙ. Музей директоры һәм ойоштороусыһы Сәләх Ғиззәтуллин Хәйҙәрҙең тик музей өсөн эшләүен талап итте. “Башҡорт ғаиләһе” циклын тамамлағас, “Башҡорт кәсептәре” серияһын башланы, унан — “Алтын табыу” композицияһы. Хәйҙәр инде музей экспонаты рәүешендә минең, әсәйемдең, туғандарының, таныштарының да йөҙҙәрен эшләп бөттө, ә Сәләх ағайға һаман аҙ һымаҡ. Музей ҡыҫынҡы, авария хәлендәге иҫке бер йорттоң бүлмәһендә урынлашҡайны, һыу үтә, еүеш.

Эш араһында, өҙөлөп-йолҡонһа ла, ни тиклем ҙур эш башҡарған Хәйҙәр ул саҡта! Республикала манекендар менән, ябай, магазин витриналарында торғандарҙан айырмалы рәүештә, башҡортҡа хас йөҙ һыҙаттарын, кәсебенә күрә хәрәкәт йүнәлештәрен кәүҙәләндереп яһаған һындар менән йыһазландырылған музей тәүге ҡарлуғас ине бит! Хәҙер Учалы тыуған яҡты өйрәнеү музейы ҙур бинала. Хәйҙәр яһаған композицияларҙы панорама рәүешендә ҙурайтҡандар, тәбиғи материалдар менән төрләндереп, эстәлеген тәрәнәйткәндәр”.

Әлбиттә, ижадсы остаһыҙ үҫешмәй, ғөмүмән, өйрәнсек һөнәрсе булып киткәнсе лә күп ара бар.

Скульптор Хәйҙәр Ғариповтың уҡытыусылары — СССР-ҙың халыҡ рәссамы Әхмәт Лотфуллин, РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған рәссамы, Башҡортостандың халыҡ рәссамы Рәшит Нурмөхәмәтов, РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ рәссамы Мөхәммәт Арыҫланов, Ғүмәр Мөхәмәтшин... Был рәссамдар Хәйҙәр училищела

уҡығанда төрлөһө төрлө предметтан дәрес биргән. Ғүмәр Мөхәмәтшиндан ул әле студент сағында уҡ (яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина бюсын эшләгәндә) һәйкәл эшләүҙең техник өлөшөнә — форма алыу, ҡойоу серҙәренә өйрәнә. “Был остаздарҙың буласаҡ скульптор ижадына йоғонтоһо нисек кенә ҙур булмаһын, сәнғәттең ысын мәғәнәһендә монументаль төрөнөң нескәлектәренә Хәйҙәрҙе Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Лев Григорьевич Кузнецов төшөндөрҙө”, — тип һанай Таңсулпан Ғарипова.

Ҡузнецов менән Хәйҙәр Учалы ҡалаһында “Һуғыш һәм хеҙмәт даны” стеллаһын икәүләп алты ай буйы әүәләй. Тиҫтәләрсә метр бейеклегендәге өс ҡырлы рельеф-стелланы эшләү Таңсулпандың да ҡара тирен ағыҙа: өҫтәрен йыуырға, ашатырға кәрәк. Сәнғәт, ғөмүмән, ижад үҙенә башкөллө сумыуҙы, бөтә булмышыңды үҙенә генә бағышлауҙы талап итә. Ә Лев Григорьевич ҡартайған, быуындары һыҙлай, подвал еүешен һеңдереүҙән биле лә тотмай. Скульптор еүеш иҙмә менән эш итә: ябай ташсы кеүек иҙелмә яһай, шунан төрлө һындар әүәләй. Ялан ҡул менән иҙелмә әҙерләргә, еүеш балсыҡты тотҡоларға кәрәк. Көн-төн, айҙар буйы, йылдар буйы шулай. Бына ошо инде һынсы шөғөлө, скульпторлыҡтың асылы!

Сәнғәттән тир еҫе сығырға тейеш түгел. Скульптор эшенә ҡәҙимге төҙөүсе шөғөлөнә төҫлө ҡарайҙар. Шуға боронғо Грецияла скульптураны сәнғәт төрөнә индереп тә тормағандар. Хәйҙәрҙең өҫ-башы ҡарағыһыҙ: ташсы инде, торғаны менән ябай йөк бушатыусы! Будда: “Ғаилә усағы — ул минең инаныуым юлына ҡоролған таш быуа”, — тигән. Ғайса иһә: “Бәндәнең дошмандары — уның яҡындары ул”, — тип тә өҫтәгән. Ғаиләле булғас, Хәйҙәргә бала-сағаларын да ҡайғыртырға кәрәк булғандыр, аҡса ла кәрәккәндер. Юҡ, Хәйҙәр Лев Григорьевич менән табыш бүлешмәй. “Эшем — Ҡузнецов өсөн, белемем — үҙем өсөн”, — ти. Уттан ут тоҡана, Кузнецов Өфөгә ҡайтып киткәс, Хәйҙәр береһенән-береһе дәүерәк һәйкәлдәргә тотона: Рысай, Науырҙа ауылында һуғыш батырҙарына һәйкәл; Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты идараһы янындағы “Дан” скверындағы һәйкәл; Учалы районының ҡыр йәнлектәрен һынландырған фигуралар; элекке мәғариф министры Исмәғил Солтанов бюсы һ.б. “Ошоларҙың һәр береһе артында көйөнөс-һөйөнөстәр, атап әйткәндә, май шәм кеүек әкрен генә һыҙа барған тормош, яҙмыш ята, — тип хәтерләй хәҙер үҙе лә күренекле әҙибә Таңсулпан Ғарипова. — Балалар ете-һигеҙ йәшкә етеретмәҫтән ата оҫтаханаһында йомошсо, ярҙамсы сифатында мәж килә, мин инде — күптән. Балсыҡтан һын яһау, әлбиттә, скульптор эше, ә унан башҡаһы — тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел. Ҡайһы саҡ Хәйҙәрҙең эштәре минең теге йәки был хикәйә өсөн сюжет та биргеләне. Мәҫәлән, “Һалдат тураһында баллада” хикәйәһен яҙыуға Хәйҙәрҙең тыуған ауылы Науырҙала ҡуйылған һәйкәл сәбәпсе. Тау башында балҡыған туғыҙ метр бейеклегендәге һәйкәл Хәйҙәрҙең тәүге үҙ аллы монументаль эштәренең береһе ине. “Көҙгө моң” хикәйәһе лә ошондай уҡ ассоциатив йоғонто аша тыуҙы. Әйе, быларҙың бөтәһен дә рәссам, уны уратып алған кешеләр, мөхит бирҙе. Нимәнелер бирҙе, нимәлер юғалды. Әлеге лә баяғы “сәнғәт ҡорбанһыҙ булмай” тигәндән әйтәм. Улдарыбыҙ Айтуған да, Айбулат та рәсемгә оҫта ине”. Подвалда форма таҙартып, балсыҡ иҙергә, каркас эшләргә ҡушҡанда, моғайын, уларҙың яҙмышына кире йоғонто яһағанбыҙҙыр, скульптура һөнәренән, рәссам булыуҙан үҙебеҙ биҙҙергәнбеҙҙер, ахырыһы, тип һанай хәҙер әсә кеше, сөнки улар сәнғәт емеше менән һоҡланыр урында башта бысрағын, мәтеле батҡағын, осо-ҡыры күренмәй торған ыҙаһын татынылар.

Һәр кемдең — үҙ яҙмышы. Рәссам Хәйҙәр Ғариповтың да үҙ булмышы — үҙенә. Шул саҡлы оло йөктө иңенә алған кешенең тормошонда ла бөтәһе лә шыма ғына бармай. Һәр ижад кешеһе башҡаларҙың тик үҙенә генә хеҙмәт итеүен теләй, тирә-яҡтағы хәл-әхүәлдәрҙең унынса ғына булыуын талап итә. Беҙ ижадсы ғаиләһе тибеҙ, ә был осраҡта ике билдәле ижадсының ғаиләһе хаҡында һүҙ бара. Ир кеше — маһир скульптор Хәйҙәр Ғарипов, ҡатын кеше — арҙаҡлы әҙибә Таңсулпан Ғарипова.

Таңсулпан Ғарипова яҙмаһынан:

“Саҡ ҡына бушаған мәлендә Хәйҙәр заказға түгел, ә йөрәк ҡушыуы менән эш башлап ебәрер ине. Бер осор ул Учалы районының Сәфәр ауылынан сыҡҡан Советтар Союзы Геройы Хәкимйән Әхмәтғәлиндың бюсын яһаны. Ҡомбриг Муса Мортазиндың бюсын ике тапҡыр балсыҡтан әүәләне, ләкин форма алырға, ҡойорға аҡса тапмау сәбәпле, бюст балсыҡта көйө кипте. Ауыр кисерҙе быны Хәйҙәр, Муса Мортазиндың Ҡөсөк ауылындағы музей-йортон да ул биҙәне. Шул йорт алдына ҡуймаҡсы ине ул бюсын, нишләптер аңлаусы, ярҙам ҡулы һуҙыусы табылманы. Учалы районында йәшәгән йылдарҙа Хәйҙәр барлыҡ халыҡ театры спектаклдәренең сценографы ла, рәссам-декораторы ла булды, бөтә ҙур байрамдарҙа сәхнәне уның ҡулдары биҙәне, һәр килгән Яңы йылды Учалы халҡы ул яһаған Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу янында ҡаршыланы. “Бәхетемде бары ижад процесында ғына күрәм”, — тиһә лә, оҫта эстән өҙгөләнде. Был өҙгөләнеү Муса Мортазиндың бюсын ҡуя алмауҙан башланды. “Ғүмер үтә, күңел ятҡан эштәр һаман ҡала бирә”, — тип уфтаныр булып китте”.

Ғүмер уҙа, инде скульптор Хәйҙәр Ғариповтың үҙенә лә 2016 йылда 68 йәш тулып китте, ә эштәре хөкүмәтебеҙ, халҡыбыҙ тарафынан лайыҡлы баһаланғанмы? “Башҡортостандың халыҡ рәссамы” исемен биреү, йәиһә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы менән бүләкләү уның бихисап ижад емештәренә лайыҡлы баһа булыр ине лә, ә кем уны хәстәрләй?!.

## Сибай осоро

Ғәҙәттә, революциянан һуң ығы-зығы башлана. Башлыҡтар, революцияны әҙерләүселәр башта бөтәһе лә ал да гөл булыр, беҙ еңгәндең икенсе көнөнә үк хөрриәт тыуыр, тип вәғәҙә итә. Әммә ысынбарлыҡта бөтәһе лә киреһенсә...

XX быуат аҙағында ла илдә болғаныш башланды, башҡорттар өсөн үҙ асылына ҡайтыу осоро булды ул, милли аң күтәрелде, тарихтағы аҡ таптар “яҡтыртылды”, ә ябай халыҡ көнитмешендә маҡтанып һөйләрлек яңырыштар булдымы? Ҡайҙалыр, бәлки, булғандыр ҙа, әммә дөйөм алғанда... Мәҫәлән, Учалыла нисәмә йыл эшләп килгән халыҡ театры бөлдө. Хәйҙәр Ғарипов шунда рәссам булып эшләй ине. Тиҫтәләрсә йылдар бөртөкләп йыйылған, эшләнгән бутафория сүплеккә ырғытылды, Хәйҙәрҙең икенсе өйөнә әйләнгән подвалдағы оҫтаханаһына ла “яңы байҙар”ҙың күҙе төштө: эшләнеп бөткән һәм бөтмәгән һындар, формалар, кәрәк-яраҡ әйберҙәр ҡала сүплегенә оҙатылды; бушаған подвалды магазин кәштәләре биләне.

Хәйҙәр Ғарипов подвалдағы шул оҫтаханаһында ине. Башта эшем әйәһе бер түрә, янына йүгереп төшөп, скульпторға екерҙе:

— Һин бында аҡса һуғып ятаһыңмы? Ҡайҙа рөхсәт ҡағыҙың?

Һынсы ыҡ-мыҡ итте. Һындар эшләп табыш алғаны юҡ бит инде уның. Китте ғәйепләүҙәр, ижадсының гонаһтары өйөлдө лә өйөлдө. Шунан, барыһына ҡул һелтәп, оҫтаханаһынан сығып китте оҫта, ул арала халыҡ театры ла эшләмәй,

ысынбарлыҡта скульптор үҙе лә ер менән күк араһында аҫылынып ҡалған йән хәлендә ине. Оҫтаханаһынан, театрынан яҙҙы ижадсы.

“Балаларҙың һөнәр алыр сағы етте, өлкәне Айтуған Санкт-Петербургҡа уҡырға инде, икенсеһе Айбулат мәктәпте тамамлай, — тип иҫләй скульпторҙың йәмәғәте Таңсулпан Ғарипова ул мәлде. — Хәйҙәр Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының эшселәр синфи сафын тулыландырырға китте. Һөнәр алышынһа ла, ғаилә тормошоноң йөкмәткеһе үҙгәрмәне: республика үҙаллылығы өсөн көсөргәнешле көрәш йылдары ине бит. Беҙ ҙә ошо көрәштең уртаһында ҡайнаныҡ”.

Артабан тормош ниндәй боролош алыр ине икән? Әмәлһеҙ мәлдә икенсе әмәле лә килеп сыға бит ул: Сибай ҡалаһында сәнғәт училищеһы асылған, ижадсыны шунда уҡытырға ҡоҙалайҙар. Хәйҙәр, инде уҡытыу эшендә лә, скульптура өлкәһендә лә ҙур тәжрибә туплап өлгөргән кеше, ең һыҙғанып эшкә тотона. Ижадсы яңынан үҙ стихияһына ҡайта, тиҫтә йылға йәшәреп киткәндәй итә. Заманында һөнәр серҙәренә уҡытыусыһы Ғүмәр Мөхәмәтшиндың оҫтаханаһында үҙ белдеге менән өйрәнгән булһа, Сибайҙа студенттар ул һабаҡты дәрестә Хәйҙәрҙән ала. Шул уҡ ваҡытта Хәйҙәр композиция буйынса ла дәрестәр алып бара. Ғөмүмән, Сибай училищеһында эшләгән йылдарҙа Хәйҙәр Ғарипов күңеленең төбөндә йөрөткән, йөрәк ҡушҡан шөғөлдәргә ныҡлап тотона: Башҡортостан автономияһына нигеҙ һалған Зәки Вәлиди Туған бюсын оҫталай башлай, уҡыусыларҙың күҙ алдында тарихи шәхестең йөҙ һыҙаттары, килеш-килбәте, образы тыуыуы, моғайын, иң ҙур һабаҡ, иң ҙур мәктәп булғандыр. Быға тиклем ул Сибай ҡалаһында Советтар Союзы Геройы Федор Белов исемен йөрөткән урамға уның бюсын эшләп ҡуйғайны инде. Был юлы, республикала беренселәрҙән булып шундай оло, бөтә төрки донъяһына билдәле шәхес һынын яһағанда, уҡытыусыһын янында тотҡоһо килде Хәйҙәрҙең, һәм ул Ғүмәр Мөхәмәтшинды Сибайға саҡырҙы. “Башҡортом” тип янып йәшәгән рәссам, сәләмәтлеге хөрт булыуға ҡарамаҫтан, саҡырыуҙы ҡабул итә.

Ошо рәүешле бер һулыш, бер ынтылышта Салауатты ла һынландыралар. Батырҙың һынын улар училищеның йәйге верандаһында яһай. Веранда йылытылмай, йәй бөтөрөргә самалаһалар ҙа, форма алырға аҡса тапмау арҡаһында, эш ҡышҡа ҡала. Ярай әле Сибай ҡалаһының ул саҡтағы хакимиәт башлығы Раил Сәлих улы Сарбаев ҙур тәүәккәллек күрһәтә: бағыусы таба, ярҙам ҡулы һуҙа. Шулай итеп, Салауат Юлаевтың башҡорт скульпторы эшләгән һыны Сибай ҡалаһында үҙ урынын ала.

Хәйҙәрҙе шул мәлдә Сибай ҡалаһына килгән мәшһүр рәссам Әхмәт Лотфуллин эҙләп таба. “Ҡустым, мин маҡтауға әллә ни әүәҫ кеше түгелмен. Эштәреңде күрҙем. Үҙебеҙҙең шәхестәрҙең портрет һынын эшләүеңде дауам ит, йөҙ һыҙаттарының оҡшашлығын бик теүәл тотоп ала беләһең, афарин!” — ти.

Хәйҙәр Зәки Вәлидиҙең бюсын эшләргә тотонған мәлдә уның ҡыҙы — тарих фәндәре докторы, профессор Иҫәнбикә Туған килә. Ә бюсты асыу тантанаһында улы, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Сүбидәй Туған, ҡатыны Энлйе, улы Амре ҡатнаша. Тантанала этнограф Абдулҡадир Инандың улы Йәшәр һәм уның дуҫы Хөсәйен бей ҙә була. “Бюсты күреп, бик ныҡ тулҡынландым, — тип һөйләй Сүбидәй хәбәрселәргә. — Атайым был хәлде күҙ алдына ла килтерә алмаҫ ине. Төркиәгә ҡайтҡас, уның ҡәбере янына барып, бында күргәндәремде һөйләйәсәкмен. Ышанам: атайымдың рухы ҡәнәғәт булыр...”

Салауат Юлаев бюсы Сибай ҡалаһы урамына ҡуйылғас, Башҡортостан Республикаһының ул ваҡыттағы Президенты Мортаза Рәхимов, Бөтә донъя

башҡорттары ҡоролтайының ул саҡтағы башҡарма комитеты рәйесе, академик Әхмәт Сөләймәнов, Билькент университеты профессоры Сүбидәй Вәлиди Туған, Сибай ҡалаһының шул ваҡыттағы хакимиәт башлығы һәм инде Башҡортостан Хөкүмәте башлығы вазифаһын биләүсе Раил Сарбаев, Башҡортостан Рәссамдар союзы рәйесе Хәтип Фазылов һәм башҡалар Салауат образының оҫта башҡарылғанлығын радио һәм телесығыштарҙа баһаланы. Гәзит-журнал биттәрендә Хәйҙәр Ғариповтың эштәре хаҡында мәҡәләләр, очерктар баҫылды. Улар барыһы ла үрҙә аталған эштәрҙең оҫта, талантлы һәм үҙенсәлекле башҡарылғанын билдәләне.

Хәйҙәрҙең артабан Шакирйән Мөхәмәтйәнов, Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов һындарына тотонғанын үрҙә әйткәйнек инде. Был эштәрҙе ул махсус оҫтахана итеп үҙенә тәғәйенләнгән бүлмәлә эшләне. Шуғамылыр, эше ырамлы барҙы. Шакирйән Мөхәмәтйәнов һыны — Учалы ҡалаһы хакимиәте заказы ине. Һәр ваҡыттағыса, эшкә тотонор алдынан скульптор бик күп әҙәбиәт уҡый (оҫтаханаһының яртыһын китаптар биләй). Улай ғына ла түгел, эште яртылаш башҡарғас, Шакирйәнде "күргән" кеше, яҙыусы һәм публицист-эҙәрмән Рәүеф ағай Насировты Өфөнән саҡыра. Йөҙҙөң һәр һыры, һәр мускулы оҙаҡ уйланыуҙар, бәхәс, фекерләшеүҙәрҙән һуң ғына һынлана балсыҡта. Геройҙың фоторәсемдәре скульптор эшләгән һындан төшөрөлгән фотолар менән (компьютер аша) сағыштырыла. Әле Шакирйәндең тыуған ауылы Ҡунаҡбайҙа торған бюст — ул геройҙың ысынбарлыҡтағы сағылышы. Оҫта бары уға һуңғы ынтылыш, һуңғы көсөргәнеш, аңлы рәүештә яһалған һуңғы аҙым алдынан була торған ҡырҡыулыҡты ғына өҫтәй...

Әйткәндәй, бөгөнгө Йылайырҙағы Бабич һыны ла, БДУ-ның Сибай институты (скульпторҙың күп эштәре нәҡ ошо институт директоры Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың ихлас фатихаһы, ярҙамы арҡаһында башҡарылған) эргәһендәге Бабич, Рәми Ғарипов бюстары ла ошондай уҡ алым менән эшләнгән. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, академик Ғайса Хөсәйенов: "Мин шуға ғәжәпләнәм: Хәйҙәр Бабичтың фажиғәһен ирендәре аша биргән. Уны шулай һынландырыр өсөн бик ҙур оҫталыҡ кәрәк!" — тине.

Мәшһүр шағир, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәйес Түләк тә мәҡәләһендә ("Башҡортостан", 2006 йыл, №194): "...ул һындар — Белов та, Вәлиди ҙә, Салауат та, Шакирйән дә — шул ҡәҙәр еңел генә эшләнелгән һымаҡ тойғо ҡалдыра. Был хәл авторҙың тотонған образының характер һыҙаттарын, тарихи фонда уларҙың башҡарған роль үҙенсәлектәрен нескә тойоуҙан, интуитив рәүештә генә түгел, аңлы рәүештә тойомлауҙан, аныҡ, ҡәтғи күҙаллауҙан һәм, әлбиттә, аңында күҙаллаған образды кешеләргә түкмәй-сәсмәй еткерә алыу талантынан, тәжрибәнән килә", — тип яҙғайны. Эйе, оҫталыҡ та, тәжрибә лә кәрәк, тағы ныҡышмалылыҡ, физик көс, иң мөһиме, халҡыңды, халҡың яҙмышын Хаҡ Тәғәлә яҙмышылай күреп яратыу кәрәк. Ошо яратыу, изге һөйөү булмаһа, Хәйҙәр Ғарипов үҙе тыуҙырған образдарҙың яртыһын да эшләй алмаҫ ине. Һынсы эше бит тамашасыны, бүтән ижадсыларҙы көнләштерә торған эш түгел — скульптор гел генә еүеш балсыҡ тота, буласаҡ һынына иҙмә иҙә, үҙе ташсы, аҙаҡ төҙөүсе булып китә. Бер яҡтан, гел генә еүеш балсыҡ, гипс, иҙелмә менән эшләү — һаулыҡҡа зыянлы шөғөл...

Ҡеше өсөн аҡсаһы ла мөһим. Һынсының көнитмеше лә — бүтән бәндәләрҙеке кеүек. Уға ла фатир, өҫтәүенә, эш өсөн оҫтаханаһы кәрәк. Тормоштоң ошондай ваҡ-төйәге хаҡында уйлайһың да, баш сайҡап ҡуяһың. Ни тиһәң дә, былар

ваҡ мәсьәлә түгел бит, аҡса — ул аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, кешенең йәшәү рәүеше. Ә Хәйҙәр Ғарипов һындарын һәр саҡ — өстән бер, бик һирәген ярты хаҡына эшләне. Аҡсаһының күп өлөшө материал һатып алыуға, эш барышы талап иткән сығымдарҙы түләүгә китеп тора, күп ваҡыт осон осҡа ялғай алмай, бурысҡа бата. Инде етте, төңөлдөм, был оло эштең осона сыҡтым, бүтәнгә тотонмаясаҡмын тиһә, намыҫланып тағы башлай, йәнә сәмләнә. Халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылғандар рухы уға тынғы бирмәй, Рәйес Түләк әйтмешләй, "ҡара ҡумта"ларҙан аҡ һындарға күсереүҙе, сығарыуҙы талап итә батыр әруахтар.

Хәйҙәр нәҡ Сибай ҡалаһында рухына теләктәштәр, арҡадаштар тапты. Шулай булмаһа, бер Сибайҙа ғына нисәмә һәйкәл ултырта алыр инеме? Нәҡ Сибайҙа тәүге Президентыбыҙ ҡулынан "БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем, Сибай ҡала хакимиәте тапшыра торған Рамазан Өмөтбаев исемендәге премияны ала. Ҡуйылған һәйкәлдәренең географияһы ла киңәйә: Йылайыр, Баймаҡ (Темәс), Әбйәлил, Учалы...

Әле, 68 йәше тулғанда ла, уның ижад ҡомары һүнмәгән, Урал батыр, Муса Мортазин, сәсәндәр образдары менән "һаташа", оҫтаханаһында башҡа тамамлайһы эштәре бихисап.

Бөгөн скульпторҙың ейәндәре Айҙар, Урал, Алһыу ҙа мәж килеп балсыҡтан һындар әүәләй. Ейәнсәре Алһыу Өфөләге Дәүләткилдиев исемендәге художество гимназияһында уҡый, ә Айҙар — Рәми Ғарипов исемендәге гимназияла. Хоҙай уларҙың йөрәгенә ниндәй ойотҡо һалғандыр? Үлән дә үҫкән ерендә үҫә, тиҙәр. Олаталары Хәйҙәр Хәлидар улы ниндәй ауыр саҡтарҙа ла бирешмәне, халҡым тип янған йөрәге, яланғас ҡулдары менән Гераклдың ғына хәленән килер эштәрҙе башҡарҙы. Халыҡ йырында әйтелгәнсә:

Һыуҙар ғына аға, таштар ҡала,
Таш араҡайында ҡом ҡала;
Ризыҡ яҙған ергә ирҙәр бара,
Тарихтарға һыймаҫ дан ҡала.

## Ижадсы яҙмышы

...Тәүге ҡырпаҡ ҡар яҡкан. Тирә-йүн һил. Әүәлге балалар баҡсаһының йәйге верандаһы. Ҡемдер шунда бөгәрләнеп кенә ятҡан. Яҡыныраҡ барайыҡ! Балсыҡҡа буялып бөткән көпө кейгән, салбар балаҡтарында ла — балсыҡ таптары, алебастр, аҡбур ағы.

Уҡыусым, туҡта! Был Хәйҙәр түгелме, скульптор Хәйҙәр Ғарипов? Шул! Бәй, ул верандала Салауат Юлаев бюсын ҡоя ине ләһә! Төн уртаһынаса эшләгән дә шунда ҡуна ҡалған! Ашауын, эсеүен онотоп, оҫтаханаһында ҡуна ҡалған. Сеү, теймәгеҙ уға, ҡуҙғатмағыҙ!

Ижадсы йән ғазаптарына тарып, башына килгән образын тыуҙыра. Был кеше — ижадсы, тағы ла ул — скульптор. Шул уҡ ваҡытта ташсы, ябай балсыҡ иҙеүсе. Скульптор ғүмер баҡый балсыҡ менән булаша, иҙелмә иҙә. Бына шул инде ул ижад, бына шундай кеше ул — скульптор. Гүзәл ижад емештәре — сәнғәт гәүһәрҙәре тыуҙырыусы кеше. Сәхнәлә тороп, халыҡ алдына ялтлап баҫыу бер мәл генә, ә ижад тигәнең бөтөнләй икенсе ғәмәл бит, йәмәғәт!

Скульптор Хәйҙәр Ғариповтың эшмәкәрлеге лә шундай... Ярай ҙа ҡылғандарынды — ижад емештәренде — тамашасы, уҡыусы, халыҡ хуплаһа, лайыҡлы баһаһын бирһә. Юҡ шул, данлы исемдәре лә, хуплау ҙа, һоҡланыу ҙа бик һуңлап килә. Ижадсыларҙы үлгәс кенә ҡәҙерләйҙәр, исемен юғары күтәрәләр, донъя ҡуйғас.

...Үрҙә арҙаҡлы скульпторыбыҙҙың йәйге верандала ҡуна ҡалып ижад итеүе тураһында әйткәйнек инде. Йәшәү шарттарына килгәндә лә, әллә ни маҡтанырлыҡ түгел икән. Беҙҙә арҙаҡлы мәҙәниәт әһелдәренә ҡараш шулай бит ул...

Ҡыҙыҡ: беҙҙә, ғөмүмән, скульптура сәнғәтенә иғтибар юҡ, кадрҙар әҙерләнмәй, һәм улар, ысынлап та, кәрәкмәй ҙә кеүек. Йәнәһе, Өфө бит Санкт-Петербург йә Мәскәү түгел, беҙгә ярар әле, беҙ ит-һөт етештерәбеҙ, руда сығарабыҙ, нефть сығарабыҙ, эшкәртәбеҙ, Рәсәй халҡын туйындырабыҙ, кәрәк-яраҡ менән тәьмин итәбеҙ.

Шулай ҙа мәнһеҙ кеше булмайыҡ — эшсе ҡулы кәрәккәндә, йүгереп киләбеҙ, ә олоғайғас, әллә ни илтифат итмәйбеҙ, тиеүем. Сибай халҡы һәм хакимиәте, моғайын, үҙенең арҙаҡлы улының йәшәү шарттарын ҡайғыртыр, етмешкә еткән ижадсыһын фатихаһынан ташламаҫ, тигән өмөттәбеҙ.

Мәҙәниәт, сәнғәт емештәре ҡоро ҡул менән генә тыумай икән шул, матди нигеҙе булмаһа, иң шәп проекттар ҙа хыялда ғына ҡаласаҡ. Мәскәү, Санкт-Петербургтағы мәҙәни ҡомартҡылар Рәсәй буйынса йыйылған аҡса иҫәбенә төҙөлгән бит, уларҙы булдырыуҙа бар ил көс түккән! Шулай булғас, беҙ ҙә Башҡортостан скульптураһы өсөн көсөбөҙҙө, матди сығымдарыбыҙҙы йәлләмәйек! Мәҙәниәт өлкәһендәге һәр оло эш аҡсаға барып төртөлә икән, әйҙә, Башҡортостан мәҙәниәте өсөн бар республика тырышһын!

## Бөтә юлдар Өфөгә илтә

“Эх, Хәйҙәр Ғариповты Өфөлә ижад иттерергә ине”, — тип хыялланам. Шулай ҙа ул. Икенсе яҡтан ҡарағанда, беҙҙә, Башҡортостанда, скульптура сәнғәте бармы икән ул, тип тә ҡуяһың. Хәйҙәр Ғариповтың үҙенең һүҙҙәренә диҡҡәт итәйек.

“Сәнғәттең был төрө беҙҙә фәҡәт тынғыһыҙ энтузиастар тырышлығы менән генә йәшәп килә. Иғтибар юҡ, кадрҙар әҙерләнмәй, һәм улар кәрәкмәй ҙә кеүек. Ул беҙ күнеккән мөхит өсөн шулайыраҡ, ә юғарыраҡ мәҙәни мөхит бейеклегенән күҙ һалһаң, шуныһына иғтибар итәһең: скульптура сәнғәте, архитектура, ландшафт дизайны кеүек үк, ҡала йөҙөн асып күрһәтеүсе иң мөһим элементтарҙың береһе. Скульптура әҫәрҙәре, айырым һәйкәл рәүешендә һынланыу менән сикләнмәйенсә, архитектура ҡомартҡылары менән берлектә гүзәл композиция тәшкил итә. Әйтәйек, ҙур ҡала майҙаны камил архитектуралы биналар менән уратылып, һәйкәл менән биҙәлһә, бик матур бер ансамбль хасил була ла ҡуя. Ҡалалағы парк, сквер, йылға яры буйҙарын һәйкәлдәр менән биҙәү айырыуса отошло. Һәйкәл, ул ниндәй генә булмаһын һәм ҡайҙа ғына тормаһын, тотош ҡаланың эстетик йөҙөнә бер яҡты һыҙат өҫтәй, йәнле итә”.

Ҡалаларыбыҙҙың йөҙөн билдәләгәндә, һәйкәлдең эмоациональ йоғонтоһон да иҫәпкә алыу зарур: әгәр ул берәй күренекле шәхескә — яҙыусыға, яугирға, сәсәнгә, композиторға, артисҡа арналһа, тирә-яҡҡа аураһын таратып, кешенең иғтибарын үҙенә йәлеп итеп торасаҡ, йәш быуынды хыялланырға, сәмләнергә мәжбүр итәсәк.

Мәҫәлән, әлеге лә баяғы Өфөбөҙҙөң йөҙөн биҙәү бик ҙур әһәмиәткә эйә. Һуңғы йылдарҙа бында ҙур аэропорт, вокзал, спорт һарайҙары төҙөлдө. Биҙәкләү эштәрендә Уралдағы таштарҙы ҡулланып, башҡорт эпостары персонаждары һынландырылған скульптуралар, панно, витраж композициялары эшләп ҡуйылһа, был, бер яҡтан, баш ҡалабыҙҙы күркәмләндерһә, икенсе яҡтан, Урал төбәгенең, башҡорт иленең, милли характерыбыҙҙың үҙенсәлекле һыҙаттарын юғары сәнғәт кимәлендә күрһәтер ине. Скульптор Ғүмәр Мөхәмәтшин бынан ярты быуат әүәл хыяллана ине был хаҡта. Өфө — башҡорт иленең үҙәге,

шуға бында Урал төбәгенең, Башҡортостандың милли характеры үҙенсәлекле һынланырға тейеш. Мәркәзебеҙ — арҙаҡлы башҡорт эшмәкәрҙәренең төйәге, беҙгә бик күп ҡунаҡтар килә, Рәсәйҙең һәр юсығына илткән юлдар Өфө аша үтә. Ә рәссамдарыбыҙҙың байтағы, бер нисә кеше берләшеп, мәҙәниәт һарайҙарында, клубтарҙа, уҡыу йорттарында панно, витраж кеүек нәмәләр эшләй. Бер урында эш тамамланһа, икенсе заказ эҙләй. Ҡайһы берҙә айҙар буйына эшһеҙ, аҡсаһыҙ ята. Шулай йөрөп, күптәр эскегә һабыша, юҡҡа сыға.

Шуның өсөн был өлкәләге эшмәкәрлекте энтузиазмға ғына ҡорорға ярамай, дәүләт хәстәре булырға тейеш. Һәйкәлдәр үлеләргә ҡуйыла, әммә улар тереләргә кәрәк. Тарихи-монументаль һәйкәлдәр был илдең Башҡортостан икәнлеген, уны ошо дәүләткә лә, тотош Уралға ла исем биргән башҡорт халҡы ойоштороғанын күрһәтеп тороу, раҫлау өсөн кәрәк. Шунһыҙ Башҡортостан Республикаһы милли-мәҙәни йөҙөн генә түгел, хатта сәйәси статусын да юғалта барасаҡ. Был ауыр хәлгә, әлбиттә, юл ҡуйырға ярамай.

Скульптура сәнғәте ҡала архитектураһына бәйле генә үҫешә. Санкт-Петербург, Мәскәү ише көслө архитектура традициялары, сағыу үҙ йөҙө, асыҡ архитектура профиле булған ҡалаларҙа скульпторға эшләүе лә еңел. Бында, алда әйткәнебеҙсә, күп нәмә ландшафтҡа бәйле. Матур диңгеҙ, ҙур йылға яры эште еңелләштерә. Беҙҙең республика ҡалалары күберәк сәнәғәт үҙәктәре булараҡ үҫеш алған. Архитекторҙар телмәрендә “промзона”, “жилые кварталы” төшөнсәләре йыш осрай. Шунда, промзона һәм кварталдар араһында, эре заводтарҙың мәҙәниәт һарайҙарына урын табылһа, бик тә хуш. Өфөнөң төньяғында Орджоникидзе һәм Калинин исемендәге мәҙәниәт һарайҙары бар. Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайын, уның алдындағы майҙанды, һәйкәлде белгестәр бик уңышлы ансамбль тип иҫәпләй. Ләкин ундай урындар баш ҡалабыҙҙа бик аҙ. 2015 йылда башҡортоң “Ете ҡыҙ” риүәйәте нигеҙендә эшләнгән һәйкәл-комплекс ана нисек йәнләндерҙе ҡаланы!

Хәҙер скульпторҙар төрлө йүнәлештә ижад итә. Авангард стилендәге әҫәрҙәр күренгеләй. Бронзанан ҡойолған урам һепереүсе, сантехник, хоккейсы, һалдат, әкиәт персонаждары ғәҙәти күренешкә әйләнде. Мәскәү, Ҡазан ҡалаларында төрлө һәйкәлдәр һаны ишәйҙе, араларында бик юғары кимәлдә эшләнгәндәре байтаҡ. Беҙ иһә әлегә ҙур пландар ҡороуҙан ары китә алмайбыҙ: 1812 йылғы Ватан һуғышы батырҙарына бәйле һәйкәл, Башҡорт дәүләт академия драма театры баҡсаһының Туҡай урамы яғында Триумфаль арка ҡуйыу тураһында һүҙ ҡуҙғатылды, ваҡыт үтә, әммә эш эшләнмәй; Өфөлә Зәки Вәлиди һәйкәле тураһында (әлеге баҡсаның Ленин урамына сыҡҡан тәңгәлендә) Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайҙарында әйтелде — ул һаман юҡ. Башҡортостан Республикаһының оло юбилейы — 100 йыллығы яҡынлашып килә, был йүнәлештә лә эш һиҙелмәй. 1812 йылда Наполеонға ҡаршы егерменән ашыу кавалерия полкы әҙерләгән, 1918 йылда тәүгеләрҙән булып үҙ республикаһын төҙөгән, үҙ ғәскәрен тергеҙгән Башҡортостанда, 1941—1945 йылдарҙа Башҡорт атлы кавалерия дивизияһын танктарға ҡаршы ташлаған илдә бөгөн килеп яугирҙарға, республикаға нигеҙ һалыусыларға, финанс наҡыҫлығына һылтанып, һәйкәлдәр ҡуйылмауын бер нисек тә аҡлап булмай. Хәйер, бында мәсьәлә күпкә киңерәк һәм тәрәнерәк: барлыҡ милли-мәҙәни мәнфәғәттәребеҙҙе финанслау, нәшриәткә, матбуғатҡа, туған телде уҡытыуға, мәҙәниәткә — ғөмүмән, республикабыҙҙың йөҙөн билдәләүсе барлыҡ компоненттарға иғтибарҙы арттырыу тураһында һүҙ бара. Ошо мәсьәләне ҡәтғи күтәреп, тағы ла баҫым яһайбыҙ, хатта талап итәбеҙ: мәҙәниәтте матди яҡтан күтәрергә ваҡыт етте!